*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ*

# Н.К.ДМИТРИЕВ ҺӘМ БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫ

Күренекле рус төркиәтсе ғалимы Николай Константинович Дмитриев башҡорт телен, халыҡ ижадын өйрәнеүгә ҙур фәнни өлөш индергән белгес. Ул революцияға тиклем үк башҡорт халыҡ әкиәттәрен яҙып алған рус ил өйрәнеүсеһе А.Г.Бессоновтың яҙмаларынан һайлап баҫтырылған «Башкирские народные сказки» (Өфө, 1941) китабына баш һүҙ итеп, ҙур мәҡәлә яҙа, башҡорт әкиәттәрен тәрән ғилми нигеҙле итеп асып бирә. Уның башҡорт мәҡәлдәре хаҡында ла яҙған төплө мәҡәләһе бар.

А.Г.Бессонов йыйынтығына яҙған инеш мәҡәләһендә лә, башҡорт йырҙарына яһаған күҙәтеүҙәрендә лә, 1928–1929 йылдарҙағы ғилми-тикшеренеү экспедициялары хаҡындағы ғилми китаптарында ла, бөтән хеҙмәттәрендә лә Н.К.Дмитриев фольклорсылар өсөн һабаҡ булырҙай фекерҙәр әйтеп ҡалдырған.

СССР Фәндәр академияһы һәм Башҡортостан хөкүмәте 1928–29 йылдарҙа Комплекслы ғилми-тикшеренеү экспедициялары ойоштора. Шуның тел һәм фольклор бүлексәһе менән профессор Н.К.Дмитриев етәкселек итә. Тәүге йылда хәҙерге Учалы, Белорет төбәктәре ингән Тамъян-Ҡатай кантонының төньяҡ-көнбайышындағы, киләһе йылына Мәсәғүт кантонының Ҡалмаҡлар йортона, Дыуан-Мәсетле йортона, Мырҙалар йортона ингән ауылдарҙы гиҙеп, диалектологик материалдар йыйғанда, уға, төп эштән айырылып, башҡорт фольклорын йәнле йәшәйешендә күҙәтергә, иселе йырға, ҡобайыр, бәйет, риүәйәт, легендаға күскән Салауат Юлаевтың вариҫтары менән осрашып һөйләшергә форсат тейә. Ғилми етәксенең үҙ ҡулдары менән яҙылған иҫәпнамәһенән аңлашылыуынса, беренсе экспедиция ваҡытында күләме 20 баҫма табаҡлыҡ фольклор өлгөләре лә йыйыла. Улар араһында һигеҙ йөҙләп йыр була. Киләһе йылына экспедиция алдына фольклор менән мауыҡмаҫҡа, диалектологик материал йыйыуға ныҡыраҡ иғтибар итергә тигән бурыс ҡуйыла. Шулай ҙа, Салауат Юлаев, 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһында (4-се һәм 3-сө версия) йырҙар теркәлә.

Экспедициялар ваҡытында яҙып алынған башҡорт фольклоры өлгөләре архивта ғына һаҡланып ятмаһын өсөн, халыҡтың һүҙ сәнғәтен һөйөүселәрҙең, белгестәрҙең иғтибарын йәлеп итһендәр тигән ниәттән сығып, Н.К.Дмитриев уларҙың ҡайһы берҙәрен нәшер итеү сараһын да күргән. 1928 йылғы экспедиция хаҡындағы иҫәпнамәһенә үҙе, юлдаштары З.Ш.Шакиров менән М.М.Билаловтар яҙып алған ике риүәйәт, кәсепкә бәйле дүрт мәғлүмәт, ун бер йомаҡ, ун туғыҙ куплет төрлө йыр, ике оҙон йыр өлгөһө («Салауат» һәм «Арҡа йорт») индергән.

1936 йылда М.М.Билалов менән берлектә баҫтырған хеҙмәтендә XIX быуат урталарында теркәлгән һәм 1929 йылғы икенсе экспедиция ваҡытында Мәсәғүт кантонында яҙып алынған биш йыр тексы бирелгән. Улар бөтәһе лә Салауат тураһындағы бер үк йырҙың төрлө версияларынан ғибәрәт. Әле әйтелгән өлгөләрҙең барыһын да ғалим үҙе урыҫ теленә тәржемә ҡылған. Башҡорт яугирҙарының Наполеон ғәскәре менән һуғыша-һуғыша барып, бөтә Европаны үтеп, 1814 йылда Парижға инеүе хаҡындағы ике йырҙы иһә 1934 йылда итальян телендә һәм ғәрәп графикаһында башҡорт телендә баҫтырған. Ике баҫма ла иҫкәрмәләр, аңлатмалар менән йыһазландырылған.

Мәсәғүт кантонына ҡараған Юныс, Торопкилде, Яңы Юлдаш (Исаҡ) ауылдарында Көнбикә Зиннурова, Ғилман Ғирфанов, Әкрәм Сәфиуллин тигән кешеләрҙән М.М.Билалов тарафынан өс версияла яҙып алынған Салауат тураһындағы йырҙарҙы күҙ уңында тотоп, Н.К.Дмитриев уларҙы XIX быуаттың урталарында ғәрәп графикаһында теркәлеп, ҡулъяҙма хәлендә Мәскәү профессоры А.Н.Максимовта һаҡланған «Башкирские песни. Описания нескольких древних памятников на башкирских землях. Обряды, литература и законоположения оренбургских мусуль-

ман» тигән фондта һаҡланған һәм Р.Г.Игнатьев, С.Г.Рыбаков яҙып ҡалдырған варианттары менән сағыштырыу мөмкинлеге барын әйтә. Был форсатты файҙаланғанда, «фольклор тексының үҫешендәге ҡайһы бер дәүерҙәрҙе билдәләргә» булыр ине, ти. Бындай хронологизациялау әҙәбиәттә интерпретацияланырға өлгөрмәгән башҡорт фольклоры өсөн айырыуса мөһим икәненә баҫым яһай, һәм үҙенең был фекерен шундай һығымта менән ослай: «Таким образом, издаваемый нами по рукописи текст «Песни Салавата» (из фонда проф. А.Н.Максимова. — А.М.) может служить исходным пунктом при суждении об истории сюжета, композиции и развитии башкирского фольклора вообще». Шулай итеп, Н.К.Дмитриев, асылда, бер үк фольклор әҫәренең төрлөсә интерпретацияланыуы, хатта ки әҙәбиәттә эшкәртелеүе лә, йәғни уның вариант, версиялары хасил булыуы, фән өсөн ҙур әһәмиәткә эйә икәнен билдәләгән. Шул вариант, версияларҙы үҙ-ара сағыштырыу төрлө тарихи дәүерҙә әҫәрҙең ҡайһы яҡтан, ни кимәлдә үҙгәрештәргә дусар булыуын, иң тотороҡло һәм тотороҡһоҙ билдәләрен, урындарын, поэтик асылын асыҡларға форсат бирә.

Күренекле лингвист бына шулай фольклор әҫәренең тарихы, яҙмышы, поэтикаһы мәсьәләһен ҡуҙғата. Ул шулай уҡ фольклор әҫәренә поэтик анализдың өлгөһөн дә бирә. Салауат йырҙарының ғәрәп графикаһында теркәлгән вариантын (Максимов фонды) көнсығыш шиғриәтенә, атап әйткәндә, уға хас ҡасыда, ғәзәл кеүек жанрҙарының билдәләре барын күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта, 1929 йылда юлдашы М.М.Билалов яҙып алған вариант, версиялар Салауат йырҙарына «ҡаты ҡанунлаштырылған берҙәмлек» хас тип әйтергә ерлек бирмәүен дә иҫкәртә. Һәм артабан бына нимә ти: «По существу мы имеем здесь только комбинацию отдельных куплетов-четверостиший, которые основательно считаются первичной композиционной формой для фольклора многих «тюркских» народностей».

Фольклор әҫәрҙәрен яҙып алғанда, Дмитриев үҙе диалектологик материал йыйыу тәжрибәһен файҙалана. Диалектологтарға: «Во время записи надо исходить из того, как произносится, а не как оно пишется по-башкирски теперь», — тип һәр һүҙҙең фонетик яҙмаһын, йәғни транскрипцияһын дөрөҫ биреү кәрәклеген әйтһә, фольклорсыларға шундай кәңәш күндергән: «Записывая образцы фольклора транскрипцией, следует также указывать места, где они были записаны. Поскольку в песне довольно часто попадаются ставшими обычными вставные слова, фразы и выражения, возможно, что язык песни не всегда будет совпадать с языком деревенского певца».

Шуныһы үкенесле, Н.К.Дмитриев баҫтырған башҡорт фольклоры өлгөләре лә әлегәсә ғалимдарыбыҙҙың иғтибарынан ситтәрәк ҡала килде. А.Н.Максимов фондынан алып, М.М.Билалов менән бергә баҫтырған «Салауат Юлай» йыры ғына С.Ә.Галин төҙөгән «Йырҙар» томына ингән, әммә иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ бер ни тиклем ҡыҫҡартма һәм төҙәтмәләр менән.

Ай аҡлы ла келәт алдарында
Күк күгәрсенләр гөрләйдер.
Тәрәзәләрдин ҡарай-ҡарай,
Күзләрендин йәшен сүртәдүр,

тигән куплет та[1], Салауат хаҡындағы йырҙың Дмитриев менән Билалов баҫмаһында килтерелгән варианттар ҙа китапҡа инмәгән. Ул варианттарҙа бығаса йыйынтыҡтарҙа осрамаған йәтеш кенә куплеттар бар.

Салауаттың кейгәне —
Ҡыҙыл да түгел, һары буҙ.
Салауаттың һөйгәне —
Икәүһе еңгә, береһе ҡыҙ.
(I вариант, 4-се куплет).

Өс атларыбыҙ бар иде,
Икеһе ерән, береһе буҙ ине.
Өс хатынларым, һай, бар иде —
Икеһе еңгә, береһе ҡыҙ ине.
Бейек тә тауҙың, әй, башына
Менә алмайҙыр инде машина.
Хатынларым күп тип инанмағыҙ, —
Йәш ҡатыным етте башыма,
(I вариант,
11–12-се куплеттар)

[1] Үткән быуаттан ҡалған ҡулъяҙмала табылып, М.М.Билалов менән Н.К.Дмитриев баҫтырған «Салауат Юлай» тигән йырҙың тексы тулы килеш «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының «Бәйеттәр» томына индерелгән ине. Ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙманы транскрипциялағанда, ҡайһы бер буталсыҡтар ебәрелеүен (мәҫәлән, төп нөсхәләге «Ебәрһәгеҙ ине» мәғәнәһендәге «Ебәрсәңез лә, палкауниктар», «аҡланған келәт» мәғәнәһендәге «Ай, аҡлы ла келәт» — «Ебәрһәгеҙ ҙә палкавниктар», «ай, аҡ ҡына келәт» рәүешендә бирелеүен) иҫәпкә алмағанда, төп нөсхә дөрөҫ күсерелгән.

Йәнә бер нисә миҫал:

Бәләкәй генә үрәтник
Йөгөрөп йөрөй уратып.
Салауат булған, ай, багатыр
Китеп бара Уфа буйлатып.
Йәмде лә Әйнең буйында
Миләштән ҡороҡ һөйрәттем.
Илама, эткәй, илама, әнкәй,
Үҙгенәйең яман өйрәттең.
Килмәнегеҙ ҙә үҙегеҙ,
Һис күренмәй һеҙҙең күҙегеҙ.
Инде лә нигә туған кәрәк,
Имен генә ҡалғас үҙегеҙ.
Күк күкрәйҙер, йәшнәйҙер —
Күгалалай атларым кешнәйҙер.
Күгалалай атның эйәләре
Баш китерҙәй эшне эшләйҙер.

(1-се, 6-сы, 7-се,
10-сы куплеттар)

Йырҙа әйтелгәнсә, Салауаттың йәше хаҡындағы һандар ҙа, бына быны куплеттар ҙа поэтик ҡомартҡы булыуҙан тыш, батырҙың тәржемәи хәленән ҡайһы бер фактик мәғлүмәттәрҙе сағылдырыуы ихтимал.

1929 йылғы экспедиция ваҡытында Мәсәғүт кантоны (хәҙерге Салауат районына ҡараған) Арҡауыл ауылы уҙаманы, мырҙалар ырыуы башҡорто С.Төхфәтуллинда һаҡланған ҡулъяҙманан күсерелеп, 1933 йылда Н.К.Дмитриев тарафынан Италияның баш ҡалаһы Римда башҡорт һәм итальян телендә баҫтырылған йырҙың тексы былай:

Французҡайларның, әй, ерләре (ауылы)
Түгәрәк-түгәрәк булыр күлләре.
Якшы атҡа менеп сөңгө тотоп
Батыр башҡорт сыға элгәре.

Французҡайларның күп пулклары —
Ниә аталмай икән туплары?
Ни аталһын аның туплары —
Плен төшкән палкауниклары.

Французҡайларның, ай, күпере
Тимер рәшәткә менән бөтөргән.
Французҡайларның мең ғәскәрен
Ун ике башҡорт бөтөргән.

Французҡайларның бик ныҡ ҡапҡаһы,
Ҡапҡа өҫтөндә атҡыс машинаһы.
Батыр башҡорттар, ҙа, килә, тигәс,
Башы(н) һалды аның батшаһы.

Йырҙың тарихындағы «бәғзе бер йырлары» тигән һүҙҙәргә ҡарағанда, яуҙа йөрөп, «французҡайларның мең ғәскәрен... бөтөргән... батыр башҡорт» егеттәре, 1814 йылда Парижды алып, «ер емертеп» йөрөгәндәрен иҫләгәндә, әле килтерелгән дүрт куплетты йырлау менән генә сикләнмәгән булғандарҙыр.

## ҠУШЫМТА

### 1928 йылда экспедиция ваҡытында яҙып алынған фольклор өлгөләре

**1. Ҡармыш ҡарттың имен ер тапҡаны**

*1928 йылда Усманғәле волосы (хәҙерге Белорет районы) Асы ауылында 80 йәшлек Мәрдән Ихсановтан Н.К.Дмитриев яҙып алған.*

Төрлө яуҙан һуң аптырап йөрөгән халыҡ ҡайҙа барырға урын тапмағас, ошо ергә (Асы тирәһенә) килеп урнашҡан. Башлап килеүсе Ҡармыш ҡарт булған. Ҡармыш ҡарттың алты улы булған. Яу килә торған булһа, бар халыҡ тоташ ҡырылып бөтмәһен, бер ерҙә бөтһә, икенсе ерҙә тоҡом ҡалһын тип, аның алты улы, алты ергә барып, тарау ултырған. Ҡармыш: «Был ер имен ер икән, мында арҡан ишергә мөмкин икән, был ерҙән китә алмаҫһығыҙ, донъя көтә торған урын ошонда булыр, яуҙан ҡотолдоҡ инде», — тигән.

Борон был ерҙәге халыҡлар иген урынына ҡымыҙлыҡ, һарна ашағаннар. Ҡармыштың Ҡалман, Юлаҡ тигән уллары булған. Бер улы аның Айры тигән ерҙә ултырған. Аҙаҡ был ергә Төрөкмән тигән кеше килеп ултырған. Аның башлап килеп ултырған ере Нәмәз буйы Нәре тауының еге. Төрөкмәндең баллары күбәйгәс, бер-беренә ҡыҙ бирешеп, туғанлашып киткәннәр. Ашлары имән сикләүеге, балтырған кеүек нәмәләр булған. Аҙағынан мал үрсеп, мал белән көн итә торған булғаннар. Мында килмәҫ борон алар Кәрәүкәм (Бесән йорт) тигән ерҙә булғаннар.

**2. Ҡолман тархандың Яуыз Иванға барғаны**

*1928 йылда Усманғәле волосы (хәҙерге Белорет районы) Йөйәк ауылында 52 йәшлек Нурғәленән М.М.Билалов яҙып алған.*

Беҙҙең олатай Ҡолман дерхан булған. Ҡолман, ҡама саңға кейеп, Иван Гырузнай тигән батшаға барып, башҡорттар өсөн ер алып ҡайтҡан.

Батша халыҡты йыйып һораған: «Кем ней теләй? Әйтегеҙ», — тигән. Татарлар, урыҫлар (син?) ялунйа һорағаннар. Ҡолман ер һораған. Шунан башҡортлар ерле килгәннәр.

Батша Ҡолманға алтын башмаҡ, алтын таяҡ, эт тиреһенә яҙҙырып указ биргән. Беҙҙең халыҡ элек Оло ялан, Арҡайорт тигән урыннарҙа күсеп йөрөгәннәр. Оло яланға борон туғыҙ ауыл үҙ изгеләрен күмә булған.

### 3. Йомаҡтар

*1928 йылда Усманғәле волосында 40 йәшлек Гөлбиҙә Нисмәтуллинанан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

1. Инәһе илле ямаҡ
   Ҡыҙы ҡыр(ы)ҡ ямаҡ.
   (Мейес — усаҡ)
2. Ҡара урман эсендә
   Ағас ҡоңырау шалтырай.
   (Тумыртҡа)
3. Баҙ аҫтында баҙ, анда бер сөгөлдөр —
   Ашағым килә, төшкөм килмәй.
   (Боҙ аҫтындағы балыҡ)
4. Ҡатар-ҡатар таш ҡуйҙым,
   Ҡыҙыл һыйырымды буш ҡуйҙым.
   (Тештәр һәм тел)
5. Ун утыҙға бирә,
   Утыҙ Бәйпеткә бирә,
   Бәйпет ярҙан тәгәрләтә.
   (Ашау. Дөрөҫөрәге: ун — ике ҡул,
   утыҙ — 30 тешле ауыҙ,
   Бәйпет — тел. — *Ә.С.*)
6. Ярты аласыҡ ярҙан ҡоламаға тора.
   (Ҡолаҡ)
7. Арт яҡта ла — йөҙ йылҡы,
   Бир яҡта ла — йөҙ йылҡы
   Тибешә лә талаша.
   (Керпек)
8. Ҡолағы бар, ишетмәй,
   Ҡойроғо бар, шыпаннамай.
   (Ҡаҙан, сүмес)
9. Йөҙө ялтырап бара,
   Ялы йылҡылдап бара.
   (Бесән, салғы)
10. Йөҙ йылҡы һыуға төштө,
    Сөләймән батыр ҡыуа төштө.
    (Ҡалаҡ, һалма)
11. Ике усаҡҡа бер күсәк.
    (Һыйыр теле. Дөрөҫөрәге: һыйырҙың ике танау тишеге һәм уларҙы ялаусы теле. — *Ә.С.*)

### 4. Йырҙар

*1928 йылда Усманғәле волосы (хәҙерге Белорет районы) Хоҙайбирҙе ауылында 45 йәшлек Йәмилә Хөбби ҡыҙынан (ул Айыс ауылы ҡыҙы) З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

1. Ялан ғ(ы)на ере бик үк йәмле,
   Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргә.
   Ҡайҙа ғ(ы)на барһаң, дуҫ иш кәрәк,
   Ҡаршы сығып атың бәйләргә.
2. Еҙем генә буйы әй һары тал,
   Яҫап ҡына ҡуйған уҡ кеүек.
   Уй хәсрәтләрем әй юҡ кеүек,
   Яна лаһа йөрәгем ут кеүек.
3. Ҡатай ғ(ы)на ере уйпаҙ-уйпаҙ —
   Һис бер сәбәп булмай ҡалҡыуға
   Ятҫам да торҫам мин теләйем —
   Һис бер сәбәп булмай ҡайтуға.

*Усманғәле волосы Арышпар ауылы 18 йәшлек Хәлилулла Харисовтан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

4. Ерәнсәкәй атның, ай, ялларын
   Ҡыбалаларҙин иҫкән ел тарай.
   Үҙ бәхеткәйләрең ай булмағас,
   Байға хеҙмәт итеп кем ярай.
5. Саҡыра, ла, кәкүк, ай, саҡыра
   Ҡарағайдин бейек ҡайынта.
   Илама ла, атай, илам(а), әсәй —
   Беҙ ҡайтырбыҙ кәкүк айынта.
6. Агиҙелкәй буйы туғай-туғай,
   Тирмә ҡороп йәйләү йәйләргә.
   Ҡайҙа ғ(ы)на барһаң дуҫың булһын,
   Ҡаршы сығып атың бәйләргә.
7. Оло Инйәркәйләрнең буйынта
   Селтәрле лә ишкәк һал белән.
   Егет к(е)нә меҫкен ҡәҙерле икән
   Эшләп кенә тапҡан мал белән.
8. Ҡарлығандин ҡара, ай, күҙләрең,
   Бөрлөгәндин ҡыҙыл йөҙләрең,
   Шәкәрләрҙин тәмне, балдан татлы
   Тел тирбәтеп әйткән һүҙләрең.
9. Ат яхшыҡайларын, ай, алайыҡ,
   Алайаҡ да һатып алайыҡ.
   Бу донъяҡайларҙың вафаһы юҡ
   Уйнап ҡына, көлөп ҡалайыҡ.

*Ҡатай волосы Ҡуҙашман ауылында 22 йәшлек (мәғлүмәтһеҙ) Әлибай Бәҙретдиновтан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

10. Аҡ ҡош ҡына килә һыу буйҙап,
    Тауштары килә тау буйҙап.
    Аҡылһыҙ ҙа түгел идем —
    Аҡылдарым бөттө, күпте уйҙап.
11. Һандуғас белән ҡарлуғас
    Осоп килә яҙ булғас.
    Төрләндереп сайрашалар,
    Ағиҙел йәмле булғас.
12. Ҡоҙасаға ни кәрәк?
    Ике стакан бал кирәк.
    Бересе күңел асырға,
    Бересе күңел ябырға.

13. Өҙевеҙҙә беҙҙең, ай, үҙевеҙ,
Һөйҙәшкәндә, беҙҙең[1] һүҙевеҙ.
Беребеҙ үлеп, беребеҙ ҡалһаҡ,
Васыят булыр әйткән һүҙевеҙ.
14. Баҡса эсендә гөл бөтәме,
Араһынан былбыл үтәме?
Үҙем барып күрмәгәс,
Хатҡа яҙып һүҙҙәр бөтәме?

*Ҡатай волосы Ҡарталы ауылында 28 йәшлек Фархизә Нәбиеванан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

15. Өҫтәремә кейгән бишмәттәрем
Ҡыҫып торҙо нәҙекәй билемде.
Ҡара(й) сәсәкәйләрем ағарғанса,
Онотмамын туған илемде.

*Ҡатай волосы Аҙналы ауылында 30 йәшлек Вафия Мөхәмммәткилдинанан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

16. Әппир генә ҡурайымды,
«Кәкүк» көйөн уралтып тартайым.
Ебәр генә, йәнкәй, беләгемде,
Урал буйҙап йөрөп ҡайтайым.
17. Ишекәйем [алды] яңғыҙ баған,
Инһәм-сыҡһам, шуға таянам.
Был донъяла ниҙәр яман,
Етем ҡалыу зары, шул яман.

*Ҡатай волосы Аҙналы ауылында 30 йәшлек (мәғлүмәтһеҙ) Хәлимә Суфиянованан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

18. Ефәк кенә билғау ун ике ҡат,
Сәсәктәре юҡҡа, һатамын.
Төн оҙондары — ун ике сәғәт
Ун сәғәттәй уйлап ятамын.

5. **Оҙон йырҙар**

*Тунғатар волосы Татламбәт ауылында 79 йәшлек Әхмәтхажи Шәфиевтан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

1. Салауат нисә йәшендә?
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Салауаттың йәшен һораһағыҙ,
Егерме лә ике йәшендә.
Салауат атҡа менәлмай,
Өҙәнгекәйләрен тотоп кейәлмай,
Салауат атҡа менденисә,
Күҙ йәшкәйен тотоп тыялмай.
Ялан ғына ерҙәң үртәне,
Тотоп ҡына мендем бүртәне.
Батсут ҡына булды, шул, Салауат —
Күп завуҡкайларны үртәне.
Үҙәндәй һыуның, ай, туғайы,
Сызғырсам да, сыҡмай турғайы.
Бер мобталаға ҡалыр булсаң,
Һис табылмай аның уғайы.

**Арҡайорт**

*Усманғәле волосы Йөйәк ауылында 40 йәшлек Гөлбәҙиганан З.Ш.Шакиров яҙып алған.*

Эй йәмле Арҡайорт буйлары:
Һуш ине ал, гөлләре,
Теҙелеп торған таулары,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Төркөм-төркөм таулары,
Тирә яғы — гөлләре,
Яҙлары һәм йәйләре,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Төрлө сәскә яланы,
Ҡыҙарып ятҡан еләге,
Йәйнең бик хуш заманы,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Ҡырлы ҡурай башлары,
Һандуғас тауышлары.
Түгәрһеҙ күҙ йәшләре,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Йәшел үлән ер ине,
Яҙ ҙа үрт янар ине,
Кис тә ут балҡар ине,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Инде үтте йәйләүләр,
Теҙеп бейә бәйләүләр,
Һай-һыу итеп әйтүләр,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Күсеп йөрөп йәйләре,
Ярлыһы һәм байлары
Эрәһәт үткән айлары,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Аппаҡ тирмәләр ҡороп,
Маллар белән күсеп йөрөп,
Йөрөгәнләр дә вайран һөрөп,
Һай, Арҡайорт буйлары.
Фаруанлыҡта[2] ул заман
Уйын көлкөдә һаман,
Мал-тыуар йөрөгән аман,
Һай, Арҡайорт буйлары.

6. **Юрама-йыр**

*Йөйәк ауылында 52 йәшлек Нурғәле Әхмәҙиевтан М.М.Билалов яҙып алған.*

Фыранцуз юрган ситен һуҙған,
Ябынып ятһам, төш күрәм.
Әллә, йәнкәй, ҡауышырбыҙ —
Төштә йәшел ҡош күрәм.

[1] Беҙҙең — дөрөҫө: *утә.*
[2] Фаруанлыҡ (ғәр.) — иркенлек.